*Ғиниәт ҠУНАФИН,*
*филология фәндәре докторы*

# ҺОҠЛАНҒЫС ҒҮМЕР, САҒЫУ ИЖАД



*(Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 90 йыл)*

Йәшәү бәхете — күңел сафлыкта.
Йәшәү бәхете — дуҫлыҡ, хаҡлыкта.
Йәшәү бәхете — илең, халҡың өсөн
Хеҙмәт аша тыуған шатлыҡта.

Ил әсәһе, халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның был робағийы Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев кеүек арҙаҡлы ил улдарының йәшәү маҡсатына, ижады асылына тап килгән нарыҡ-символ булып тора тиһәк, һис тә арттырыу булмаç. Нәҡ ана шул күңел сафлығы, яҙған фекерҙәренең дөрөçлөгө, әйткән һүҙҙәренең хаҡлығы һәм ихласлығы, оптимистик рухы, халҡы һәм тыуған Башҡортостаны өсөн бөтә көсөн биреп хеҙмәт итеүе менән ғилми-әҙәби йәмғиәтселектең, йөҙәр меңләгән уҡыусыларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итте, башҡорт тел ғилеме, башҡорт әҙәбиәте тип аталған мөһабәт тауҙар теҙмәһендәге гүзәл бейеклектәрҙең береһенә әүерелде Ж.Кейекбаев. Бөгөнгө көндә уның хаҡында күп мәҡәләләр, иҫтәлектәр яҙылған, фәнни эштәренә һәм әҙәби әҫәрҙәренә төрлө хеҙмәттәрҙә күҙәтеүҙәр яһалған, ижад емештәре мәктәп һәм вуз дәрестәрендә урын алған. Әҙәми заттың йәшәү бәхете, халыҡ күңеле түрендә урын алыуы, үлемһеҙлеге — бына ошо инде.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың илаһи һүҙ сәнғәте, серле һәм мөғжизәле ғилем донъяһына юлы шиғриәт һүкмағынан башлана. Уның поэтик әҫәрҙәре 30-сы йылдар башында уҡ ваҡытлы матбуғат биттәрендә күренә башлай. Артабан альманахтарҙа ла урын алалар. Әҫәрҙәрен йәш шағир Табын тигән тахаллус-псевдоним аҫтында баҫтыра. Бында уның халыҡ тарихын яҡшы белеүе, милли патриотизм тойғоһо үҫешкәнлеге, традицияларға тоғролоғо асыҡ күренә.

30—40-сы йылдар шиғриәтенә хас булғанса, Ж.Табын (Кейекбаев) әҫәрҙәренә мәдех стиле, публицистик пафос характерлы. Шиғри бағышлау, шиғри хат, мәдхиә-ода, ҡобайыр — ул йыш мөрәжәғәт иткән жанрҙар. Уның поэзияһында көнсығыш һәм көнбайыш халыҡтарының әҙәби-эстетик ҡараштарын, образлы фекерләү традицияларын синтезлаштырырға, уларға туған халҡының ауыҙ-тел ижады һулышын өрөргә тырышыу ярылып ята. Төрлө телдәрҙе белергә ынтылған йәш шағир айырыуса көнбайыш әҙәбиәте, философияһы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһына. Шул уҡ ваҡытта ул бер генә мәлгә лә туған әҙәбиәте һәм фольклоры мөхитенән айырылмай. Хатта уның Анри Барбюс, Фридрих Вольф, Эрнест Тельман кеүек шәхес-



10-2001.p65 179 02.11.01, 15:32

тәргә бәйле тыуған поэтик бағышлау-ҙарында һәм мәдхиәләрендә лә башҡорт йыр стихияһынын эҙе һиҙелә. Шағир нигеҙҙә халыҡтар дуҫлығы, хеҙмәт, тыуған ил, тәбиғәт һәм, әлбиттә, мөхәббәт темаларына мөрәжәғәт итә («Рәсәй», «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар», «Егеттең ҡыҙға әйткәне», «Һәләүек» һ.б.).

Шағир Ж.Табын (Кейекбаев) халыҡ шиғыры — ҡобайыр формаһын бигерәк тә үҙ итә. Дуҫлыҡ-туғанлыҡты, халыҡ бәхете, ил үҫеше өсөн фиҙакәр хеҙмәтте, патриотизмды, ватаныбыҙҙағы иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни ҡаҙаныштарҙы данлауға арналған, тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле «Ленин хаҡында», «Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», «Рәсәй», «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар», «Дуҫ тигәнең шул булыр» ише ҡобайырҙары унын был жанрҙың поэтикаһын төплө аңлауын күрһәтә. Бына бер генә миҫал:

Дуҫ тигәнең шул булыр —
Теләр теләктең һәйбәтен,
Дуҫ тигәнең шул булыр —
Һөйләмәҫ дуҫының ғәйбәтен,
Һөйләмәҫ дуҫының ғәйбәтен.
Дуҫ тигәндең эсендә
Әйәрле-йүгәнле ат ятыр,
Дуҫ тигәндең хисендә
Изге ниәт, хаҡ ятыр.
Дошмандарҙың эсендә
Быҫраҡ, ҡара тап ятыр,
Быҫраҡ, ҡара тап ятыр.

Жәлил Ғиниәт улының 30-сы йылдарҙа уҡ башланған поэтик күнекмәләре, халыҡ шиғриәтен яҡшы үҙләштереүе уға тәржемә эшендә ныҡ ярҙам итә. Бөйөк немец шағирҙары Гейне менән Гётеның әҫәрҙәрен үҙ нөсхәләренән туранан-тура башҡортсаға ауҙарғанда, ул уларҙың идея-маҡсаттарына ярашлы ритмикаларҙы һәм интонацияларҙы тыуҙырыуға өлгәшә. Ошо уңайҙан Сәләх Кулибай иҫтәлегенән ҡыҫҡа ғына өҙөк килтереү урынлы булыр: «Жәлил миңә Гейненың данлыҡлы «Силезия туҡыусылары» тигән шиғырын һәм башҡа лирик шиғырҙарын уҡыны. «Был шиғырҙар руссаға тәржемәләре буйынса, әлбиттә, һиңә таныштар. Ләкин былар руссанан тәржемә түгел, ә төп оригиналдан», — тип аңлатты ул миңә. Унан немец телендә бер нисә строфа шиғыр уҡып: «Ритмик яңғырауы яғынан оҡшашлыҡ бармы?» — тип һораны. «Бик оҡшаш», — тинем мин. «То-то», — тип йылмайҙы Жәлил».

Ғөмүмән, Ж.Кейекбаевтың тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге — унын ижадындағы үҙе бер ҙур иғтибарға лайыҡ йүнәлеш. Унын тырышлығы арҡаһында башҡорт уҡыусылары немецтың Гейне, Гётелары ижады менән генә түгел, бәлки антифашист яҙыусылары Э.Войнерт, В.Бредель, Ф.Вольфтарҙың, күренекле ғалимдары һәм әкиәтселәре бер туған Яков һәм Вильгельм Гриммдарҙың әҫәрҙәре менән таныша. Тәржемәсе бөйөк А.Пушкин, Л.Толстой, П.Бажов әкиәттәрен, М.Горький менән М.Пришвиндарҙың айырым хикәйәләрен дә башҡорт теленә ауҙара. 1963 йылда ул ҡан ҡәрҙәштәре ҡарамағына «Венгр халыҡ әкиәттәре» тигән йыйынтыҡты тапшыра. Был факттар үҙҙәре генә лә унын киң ҡарашлы, юғары зауыҡлы әҙип булғанлығы хаҡында асыҡ һөйләй.

Ж.Кейекбаев — ҙур педагог-әҙип. Ул бөтәһенән дә элек халыҡ ижадына тәрән ихтирам менән ҡарай, унын йөҙөндә халыҡтың тормош һабаҡтарын, тарихын, этнографияһын, педагогик, этик, эстетик, фәлсәфәүи ҡараштарын күрә, бөйөк Ушинский, Пушкин, Толстойҙар кеүек уны йәш быуынды тәрбиәләү маҡсаттарында ижади файҙаланырға тырыша. Шул ерлектә унын иҫ киткес халыҡсан тел менән яҙылған, башҡаларға әхлаҡи тәрбиә, эстетик зауыҡ ҡына түгел, күп яҡлы белем дә бирерҙәй ғәжәп бай йөкмәткеле тиҫтәләгән әкиәттәре барлыҡҡа килә. Тиҙ арала улар бер нисә тапҡыр башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күреп, балалар әҙәбиәтенең алтын фондына әүерелә. «Урман әкиәттәре» һәм «Терпе тураһында әкиәт» тигән баш аҫтында тупланған был әҫәрҙәрҙә балалар тәбиғәттең серле лә, йәнле лә тормошо, хайуандар һәм ҡош-ҡорттар донъяһы хаҡында ғәжәп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, яҡшылыҡ һәм яуыҙлыҡ, матурлыҡ һәм шөкәтһеҙлек, егәрлелек һәм ялҡаулыҡ кеүек күренештәр менән күҙмә-күҙ осраша, мажаралар «илендә» гиҙә, уларҙан фәһем ала, тейешле һығымталар яһай.

Оло талант һәр ваҡыт күп яҡлы була. Ж.Кейекбаев — тап шундай шәхес. Аналитик тәбиғәтле ғалим, нескә хисле шағир, ҡобайырсы сәсән, йор һүҙле әкиәтсе, тапҡыр тәржемәсе булыу өҫтөнә ул үҙен хикәйә һәм повесть оҫтаһы, атаҡлы романист итеп тә таныта. Хикәйә һәм повестарында ла ул балалар әҙәбиәтенә тоғролоғон һаҡлай. Әйтәйек, унын «Дуҫлыҡ» тигән

мажаралы повесы Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы үсмерҙәр тормошон сағылдыра. Ә был прозаиктың мәктәптә бергә уҡыған яҡын дуҫы, Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәголов хаҡындағы документаль повесы бер нисә тапҡыр баҫылып сыға, төрлө быуын уҡыусылар араһында киң танылыу таба. Шулай ҙа Ж.Кейекбаевтың уға ҡарата «оло әҙип», «мәшһүр әҙип» ише эпитеттарҙы ауыҙ тултырып әйтергә хоҡуҡ биргән төп әҫәре булып «Туғандар һәм таныштар» романы тора. Уның хаҡында шаҡтай күп һәм төплө фекерҙәр әйтелгән. Бында бары шуны әйтергә кәрәк: әҙәбиәт белгестәре бер тауыштан «Туғандар һәм таныштар» романын 40-сы йылдарҙағы башҡорт прозаһының оло ҡаҙанышы, уның жанр-стиль йәһәтенән үсешендәге, дәүерҙең ҡатмарлы үсешүҙгәреш ҡанундарын һүрәтләүҙәге, социаль-психологик характерҙар тыуҙырыуҙағы ҙур бер баҫҡысҡа күтәрелеше, тип баһаланы.

Ысынлап та, тап ошо әҫәре менән Ж.Кейекбаев үҙен ысын мәғәнәһендә төрлө ижтимағи күренештәрҙең социаль-сәйәси, иҡтисади һәм әхлаҡи асылына тәрән үтеп инеү һәм киң художестволы дөйөмләштереүҙәр яһау юғарылығына күтәрелгән әҙип итеп танытты. Романда күҙгә иң ташланғаны — хәл-ваҡиғаларҙың, мул һыулы йылға кеүек, талғын, әммә тулы ҡанлы, үҙ-ара ярайһы уҡ тығыҙ һәм тормоштағыса ҡатмарлы бәйләнештә ағыуы, авторҙың йәмғиәт ҡанундарының, тормош күренештәренең асылына тәрән үтеп кереүе, образ-характерҙарҙың заман менән тығыҙ бәйләнештә бирелеүе. Уның өсөн XX быуат башында Башҡортостандың хатта иң төпкөл төбәктәрендә лә йәмғиәттең эске үсеш ҡанундарына ярашлы барлыҡҡа килгән социаль ҡаршылыҡтарҙың һөҙөмтәләрен генә түгел, бәлки ана шул ҡаршылыҡтарҙың барлыҡҡа килеүе һәм үсеш процесы, тормош ағышын мөмкин тиклем бөтә тулылығында күрһәтеп биреү мөһим. Шуға ла әҫәр туҡымаһында хатта тәү ҡарашҡа уның идея-эстетик маҡсатына әллә ни бәйле түгел кеүек күренгән мираҫ бүлешеү, һабантуй, бәйгегә аттар әҙерләү, туй, сеңләү, бәйет, йыр ише этнографик һәм фольклор материалдарының ҙур ғына урын алыуы ла беҙҙең өсөн тәбиғи күренә. Сөнки, И.А.Гончаров һүҙҙәре менән әйткәндә, киң ҡоласлы, даирәле эпик әҫәргә «тормоштағы бөтә нәмә лә ҡарай, бары тик улар дөрөҫ һәм талантлы тасуирланһын». Ж.Кейекбаев ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлап эш итә. Уның әҫәрендәге бер генә һөйкәлмә ваҡиға һәм образ да, бер генә этнографик күренеш һәм фольклор материалы ла уның художество тоҡымаһынан һерәйеп сығып тормай. Был материалдарҙы ул маҡсатҡа ынтылышлы рәүештә осорҙоң тарихи йөҙөн, халыҡтың йәшәү, фекерләү рәүешен, психологияһын, әхлаҡи-этик донъяһын бөтә тәбиғилегендә асығыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу өсөн файҙалана.

Ғөмүмән, Ж.Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар»ы менән ентекле танышыу уны бер ниндәй икеләнеүһеҙ осорҙоң иң характерлы һыҙаттарын сағылдырған, тормошто уның ҡатмарлы ҡаршылыҡтарында иркен һәм тулы яҡтыртҡан, хәл-ваҡиғаларҙың муллығы, хикәйәләүҙең тығыҙлығы, сюжет линияларының төрлөлөгө, образ-персонаждарҙың күплеге һәм шуға бәрәбәр рәүештә идея-проблематик офоҡтарының киңлеге һәм драматик пафосы менән айырылып торған ҙур эпик әҫәр тип иҫәпләргә хоҡуҡ бирә. «Туғандар һәм таныштар» әҫәре менән Ж.Кейекбаев үҙен ысын мәғәнәһендә романса фекерләү маһирлығына эйә һүҙ оҫтаһы итеп таныта.

Ж.Кейекбаевтың әҙәбиәткә бәйле йәнә бер эшмәкәрлек йүнәлеше хаҡында ла ҡыҫҡаса әйтеп үтәйек. Шағир, сәсән, тәржемәсе һәм прозаик Кейекбаевты күпмелер дәрәжәлә әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе тип тә иҫәпләргә була. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә ул даими рәүештә башҡорт фольклоры һәм әҙәбиәте, уның айырым вәкилдәре тураһында мәҡәләләр менән сығыш яһай, башҡорт уҡыусыһын күренекле сит ил әҙиптәренең ижад биографияһы менән таныштырыуға күп көс һала.

Бына шулай үҙенең исеменә есемен тап килтереп, күп яҡлы ҙур, бөйөк эштәр башҡара Кейекбаев. Уның бөйөклөгө, шөһрәтле талант эйәһе булыуы айырыуса фән донъяһында күренде. Беренсе сиратта ул үҙен фундаменталь белемле, киң эрудициялы тел белгесе итеп танытты. Башҡорт тел ғилеме үҙенең бөгөнгө ҡаҙаныштары, киң илебеҙ сиктәрен ашып, донъя күләмендә танылыу табыуы менән күп йәһәттән уға бурыслы.

Ж.Ғ.Кейекбаев тел мәсьәләләре менән 30-сы йылдар башында, Башҡорт педагогия техникумында уҡыған

сағында ҡыҙыҡһына башлай. Ошо ваҡыттан алып ул, ҡайҙарҙа ғына булмаһын, кем генә булып эшләмәһен — ауыл йәки ҡала мәктәптәрендәме, редакцияларҙамы йәки юғары уҡыу йорттарындамы, үҙенең тел өлкәһендәге эҙләнеүҙәрен һис кенә лә туҡтатмай. Ғилем донъяһына аяҡ баҫыуының тәүге йылдарында ул башҡорт теленең орфографияһы (дөрөҫ яҙыу әйтелеше) мәсьәләләрен фәнни яҡтан хәл итеү өҫтөндә эшләй. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә был проблемалар буйынса мәҡәләләр баҫтыра, рус графикаһы нигеҙендә яңы башҡорт алфавитын эшләүҙә әүҙем ҡатнаша. Ниһайәт, 1948 йылда ул «Башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеше» исемле хеҙмәте өсөн филология фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжәгә лайыҡ була.

50-се йылдарҙа Ж.Ғ.Кейекбаев еңһыҙғанып башҡорт теленең һөйләштәрен тикшереү эшенә тотона. Тел ғилеменең был өлкәһендә лә ул оригиналь фекер-идеялар күтәреп сыға, күп кенә мәсьәләләргә яңыса ҡараш ташлай. Әйтәйек, уның башҡорт һөйләштәренә яһаған яңы классификацияһы әлеге көндә лә үҙенең ғилми әһәмиәтен юғалтҡаны юҡ.

Шул уҡ йылдарҙа ғалим башҡорт теленең башҡа төрки-алтай телдәренә мөнәсәбәтен, ҡәрҙәшлеген асыҡлау идеяһы менән яна башлай. Шуның бер һөҙөмтәһе булараҡ, 1958 йылда уның башҡорт теленең фонетик һәи фонологик системаһын сағыштырмаса-тарихи планда яҡтыртҡан фундаменталь хеҙмәте донъя күрә. Был хеҙмәте менән ғалим үҙен тюркологияның алғы сафында барыусы тикшеренеүсе итеп таныта. Ошо темаға ул докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Бындай юғары ғилми дәрәжәгә ул башҡорт филологтары араһынан тәү башлап лайыҡ була.

Ж.Ғ.Кейекбаев башҡорт теленең һүҙ составын да монографик планда беренсе булып өйрәнде. «Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы» (1966) тигән хеҙмәтендә ул һүҙ һәм төшөнсә, уларҙың мәғәнәһе һәм функцияһы, сит телдәрҙән үҙләштерелгән лексик берәмектәр, стилистика һәм башҡа ҡатмарлы мәсьәләләрҙе бай фактик материалдар нигеҙендә юғары теоретик кимәлдә хәл итеүгә өлгәште.

60-сы йылдарҙа Жәлил Ғиниәт улының ғилми эҙләнеүҙәре офоҡтары тағы ла киңәйә төшә. Педагогия училищелары, юғары уҡыу йорттары һәм урта мәктәптәр өсөн тел буйынса дәреслектәр, программалар төҙөү менән бер рәттән («Хәҙерге башҡорт теле» — 1966, «Төрки телдәренең сағыштырмаса грамматикаһы» буйынса программа — 1967, «Башҡорт теленең тарихи грамматикаһы» буйынса программа — 1967 һ.б.), ул урал һәм алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге проблемаһы менән арыу-талыуҙы белмәй шөғөлләнә. Һөҙөмтәлә, билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһына нигеҙләнеп, был телдәр структураһының, грамматик моделдәренең, беренсе сиратта, һүҙ ҡалыптарының уртаҡ булыуын ышандырырлыҡ итеп иҫбатлай, тиҫтәләгән мәҡәләләре һәм «Введение в урало-алтайское языкознание» тигән хеҙмәте менән урал-алтаистика фәненең тәүге нигеҙ таштарын һала.

Совет тел ғилемен үҫтереүгә ошондай гәйәт ҙур өлөш индереү менән бер рәттән, Ж.Ғ.Кейекбаев республикабыҙҙа халыҡ мәғарифын үҫтереүгә лә күп көс түгә. Студенттарға төплө белем биреүҙе, юғары әҙерлекле ғилми-педагогик кадрҙар әҙерләүҙе ул үҙенең төп һәм изге эштәренең береһе тип һанай. Уның оҙаҡ йылдар буйына йәмәғәт башланғысында БАССР Мәғариф министрлығының программа комиссияһы рәйесе, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының редколлегия ағзаһы булып тороуы ла — халыҡ мәғарифын үҫтереүгә практик өлөш индереүенең бер дәлиле ул.

Тыуған илебеҙ Ж.Ғ.Кейекбаевтың күп яҡлы ғилми-эҙәби, педагогик һәм йәмғиәт эшмәкәрлеген юғары баһаланы. Ул Ленин, «Почет билдәһе» ордендары, миҙалдар, «РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы» билдәһе менән наградланды, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды, республикабыҙҙың юғары органдарына депутат итеп һайланды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғүмере, бер мәлдә генә күк көмбәҙен һыҙып үткән метеор кеүек, ҡыҫҡа булды. Ҡыҫҡа, ләкин ифрат мәғәнәле, тос йөкмәткеле һәм... мәңгелек. Эйе, мәңгелек. Бит кеше ғүмеренең оҙонлоғо үтелгән юлдарҙың, йәшәлгән йылдарҙың күплеге менән түгел, бәлки шул йылдар һуҙымында башҡарған эштәрҙең күләме, асылы һәм әһәмиәте менән билдәләнә. Тап ошонон менән Ж.Ғ. Кейекбаев халыҡ йөрәгендә мәңгелек урын алды.



10-2001.p65 182 02.11.01, 15:32